Иҫәнғол ауылы башҡорт гимназия-интернаты

# Арғымаҡ

Аң. Рух. Ғәм. Ырыҫ. Моң. Аҡыл. Ҡот.

февраль, 2021

## Ил һөйәрҙәр тәрбиәләү – изге бурыс

Үҫеп килеүсе быуынды халҡыбыҙҙың ысын вәкилдәре итеп тәрбиәләүҙең мөһим ысулдарының береһе - уҡыусыларыбыҙҙы илһөйәрлек рухында тәрбиәләү. Ил, тел, йәмғиәт, тәбиғәт төшөнсәләренә һөйөү уятыу, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү – һәр беребеҙҙең оло маҡсаты. Гимназиябыҙҙа уҡыусыларға әхлаҡи, рухи тәрбиә биреүгә, илен, телен һөйгән шәхес тәрбиәләүгә маҡсатлы йүнәлеш алынған, үҙенә генә хас *традициялар* булдырылған, республика мәғариф системаһында үҙенең лайыҡлы урыны бар. Башҡорттоң тәбиғәтен, матур ғөрөф-ғәҙәттәрен, илһөйәрлек тойғоларын күңелендә йәшәткән уҡытыусылар, тәрбиәселәр эшләй гимназияла.

Милли рухтың сая һаҡсылары булған зыялылар менән осрашыу, милләтенә, туған халҡына йөрәгендә оло ихтирам йөрөткән уҡыусыларыбыҙҙы дәртләндереү, һәр баланың һәләтен үҫтереү, халыҡ педагогикаһына таянып, тәрбиә эшенә иғтибарҙы тағы ла көсәйтеү-рухи тәрбиә биреүҙә этәргес көс булып тора.

Илһөйәрлектең тамыры булған халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсә килгән йола-традицияларыбыҙға, туған телгә, йыр-бейеүҙәребеҙгә ҙур иғтибар бирелә гимназиябыҙҙа. Шуға ла башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара конкурстарҙа, ижади бәйгеләрҙә уҡыусыларыбыҙ алдынғы урындар яулай. Билдәле шәхестәребеҙ, тыуған төйәгебеҙ менән бәйле эҙләнеү эштәребеҙ юғары баһалана.

Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандарына, Ҡоралды көстәр ветерандарына, әлеге мәлдә Рәсәйҙең именлек һағында тороусыларға иғтибар һәм ихтирам йәшәй уҡыу йортобоҙҙа. Улар менән осрашыуҙарҙа, тематик кисәләрҙә ата-бабаларыбыҙҙың данлы тарихына ғорур ҡараш булдырыла, хәрби-патриотик тәрбиәләүгә, әрме хеҙмәтенә әҙерләүгә күп көс һалына. Гимназияла, уҡыусыларыбыҙҙың рух һәм тән сәләмәтлеген, физик яҡтан ныҡлығын, сыҙамлыҡ, отҡорлоғон хәстәрләп, "Көрәш" түңәрәге эшләй. Спорт өлкәһендә лә республика кимәлендә уңыштарыбыҙ байтаҡ.

Тәбиғәт- кешенең рухи үҫешенең сығанағы. Гимназияла алып барылған экскурсия, туризм эшенең әхлаҡи тәрбиә биреүҙә, илһөйәрлек тәрбиәләүҙә ыңғай йоғонтоһо бар. Уҡыусыларыбыҙ өсөн районыбыҙҙың тарихи, иҫтәлекле урындарына, тәбиғи ҡомартҡыларыбыҙға сәйәхәттәр ойошторола. Халҡыбыҙҙың үткәнен, тарихын сағылдырған, шөғөлөн, мәҙәниәтен билдәләгән музей ҙа ойошторолоп килә.

Йылғалар кескәй инештән башланып, тулы һыулы дарьяға әүерелгән кеүек, мәктәп илһөйәрҙәренән оло Ватан илһөйәрҙәре тәрбиәләнә. Тыуған ерен, илен яратҡан, телебеҙгә ихтирамы булған, ата-бабаһының кем икәнен белгән йәштәр үҫә гимназиябыҙҙа. Уҡыусыларыбыҙҙан илһөйәр, телһөйәр шәхестәр, халыҡты алға әйҙәрлек яңы лидерҙар үҫер тигән ышанысыбыҙ ҙур.

Н.М.Ҡунысбаева, китапханасы



## Иҫтәлекле осрашыуҙар

Башҡорт гимназия-интернатында патриотик рухта саралар йыш үтеп тора. Был кисәләр уҡыусыларҙы батырҙар, тарихи шәхестәр рухында тәрбиәләү, Тыуған илгә, тыуған төйәккә һөйөү уятыу маҡсатында ҙур әһәмиәткә эйә. Йыл һайын 15 февраль - Яугир – интернационалистарҙы иҫкә алыу көнөнә арналған осрашыуҙар үткәреү балалар күңелендә ғорурлыҡ тойғоһо уята. Тантаналы линейкала Ватандан ситтә хеҙмәт итеп һәләк булыусыларҙы иҫләп бер минутлыҡ тынлыҡ, спорт залда йыр һәм сафта йөрөү конкурсы үтә. Яугир – интернационалистар дәһшәтле ут эсендәге кисерештәре менән бүлешә, уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһынған һорауҙарына яуап бирә. Ҡыҙыу нөктәлә көн һайын ҡан ҡойоштo күреү уларҙың күңеленә байтаҡ юшҡын һала, яҡын дуҫтарын юғалтыу тетрәткес хәл була. Балаларға тыныс тормоштоң ҡәҙерен белергә, тырышып уҡырға, спорт менән шөғөлләнергә, тыуған ил өсөн кәрәкле кеше булырға өндәй яугирҙар.

Ил батырҙарын онотмайыҡ, тыныс тормошто ҡәҙерләйек!

Альбина Уразаева, өлкән тәрбиәсе





## Гимназия ныҡлы ҡанаттар ҡуя

Уҡыу йортобоҙҙо тамамлаған төрлө йылдарҙағы сығарылыш уҡыусылары хәрби юлды һайлаған.Улар тураһында булыр һүҙебеҙ.



***Байгилдин Ирәндек,***
***2014 йылғы сығарылыш уҡыусыһы***

Ирәндек уҡыуҙа,спорт ярыштарында, төрлө предмет олимпиадаларында һәм ижади конкурстарҙа әүҙем ҡатнашып, гимназиябыҙ тарихында сағыу эҙ ҡалдырған уҡыусыбыҙ.

Уға ышанысыбыҙ ҙур ине, сөнки бөтә яҡтан да һәләтле, физик һәм рухи яҡтан сәләмәт, ең һыҙғанып эшләй белгән, уйлы, ғәмле, маҡсатлы, ипле, аҡыллы, егәрле егетебеҙ ваҡыт юҡлығына зарланманы. Һәр көнөнә маҡсат ҡуйып, шуға ирешергә тырышты. Бөтә спорт төрҙәрендә лә беренселекте яулаған егеттең маҡтау грамоталары, кубоктары һынап бөтөрһөгөҙ.

Ышаныслы, яуаплы, төплө егетебеҙ гимназиябыҙҙы 2014 йылда алтын миҙалға тамамлап Берҙәм Дәүләт имтихандарын ең һыҙғанып тапшырып Өфө Дәүләт авиация техник университетының хәрби техник факультетына уҡырға инә. Әлеге ваҡытта Ирәндек Свердловск өлкәһененең Каменск-Уральск ҡалаһында һөнәре буйынса хеҙмәт итә. Ирәндек тауҙары һине гел бейеклеккә әйҙәһен, ирәндек бөркөтө булып тыуған төйәгеңә, ырыҫ килтер! Ҡуйған маҡсаттарың тормошҡа ашһын! Без һинең менән ғорурланабыҙ!





***Бикбулатов Илмир,***
***2015 йылғы сығарылыш уҡыусыһы***

Беҙҙең киләсәгебеҙ ниндәй йәштәрҙән тора?... Әлбиттә, һәр яҡлап та талантлы, өлгө булырҙай егет-ҡыҙҙарҙан.Ошондай рухлы, аҡыллы, егәрле,ҡыйыу ҡарашлы,ысынлап та, бар яҡтан талантлы егетебеҙ тураһында һүҙ бара,ул Бикбулатов Илмир була.Ул 1997 йылдың 23 апрелендә Ейәнсура районы Этҡол ауылында донъяға килә.2004-2012 йылдарҙа тыуған ауылында белем ала.2013 йылда Абзан мәктәбен тамамлағас, гимназияға уҡырға килә. Гимназияла уҡыу дәүерендә Илмир, теүәл фәндәрҙе үҙ иткән егет, уҡытыусылар һөйөүен яулап та өлгөрә. Бөтә дәрестәрҙә әүҙем ҡатнашып, тик яҡшы билдәләренә генә өлгәшә. Һәр яҡтан да өлгөр егет спорт менән дә бик дуҫ була. Йыл һайын район, республика кимәлендә үткән еңел атлетика, волейбол, көрәш, саңғы ярыштарында гимназия намыҫын яҡлап, төрлө призлы урындар яулай. Тәүәкәллек,тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ кеүек сифаттарҙы үҙ иткән егетебеҙ-гимназия ғорурлығы. Маҡсатка ынтылыусан уҡыусыбыҙ,бәләкәстән хәрби булам тип хыяллана һәм уның маҡсаты тормошҡа аша!Ул 2015 йылда гимназияны тамамлап, Өфө авиация университетының хәрби кафедраһына уҡырға инә.2020 йылда уңышлы тамамлай. 2020 йылдың 1 августында армияға алынып,үҙ һөнәре буйынса Ҡыҙыл ҡалаһында хеҙмәт итә.Илмирға иҫән-һау хеҙмәт итеп ҡайтырға яҙһын!Уға яңы үрҙәр,бәхет, һаулыҡ, оҙон ғүмер, уңыштар теләйбеҙ!

***Аҡбутин Илмир,***
***2013 йылғы сығарылыш уҡыусыһы***

Бала саҡ шундай күңелле ,атай һәм әсәй һөйөүе наҙы менән үҫкән бала көслө рухлы була тиҙәр. Һүҙем маҡсатлы егет Илмир Тәлғәт улы Аҡбутин тураһында булыр. Ул 1995 йылдың 29 августа гаиләлә дүртенсе бала булып донья килгән. Бәләкәйҙән үк үҙен һалдат кеүек тойоп,марш хәрәттәрен яһап үҙ – аллы ишек алдында уйнаған. Ибрай урта дөйөм белем биреү мәктәбендә тик яҡшы билдәләргә уҡый, спорт менән шөғөлләнә, йүгереү һәм саңғы ярыштарында әүҙем ҡатнаша. Туғыҙынсы класты тамамлағандан һуң, 2011 йылда Иҫәнғол башҡорт гимназия-интернатына уҡырға килә. Гимназияла уҡыған йылдарында бөтә яҡтан да тик яҡшы һөҙөмтәләргә эйә була, уҡытыусылар маҡсатлы,тырыш,алдынғы ҡарашлы егет булыуы өсөн яраталар,хөрмәт итәләр.Ун беренсе класты көмөш миҙалға тамамлап, ҡулына өлгөргәнлек аттестатын алғас, Илмир Тәлғәт улы үҙен ниндәй һөнәр эйәһе буласағын бик яҡшы аңлай. Өфө авиация техник университетының Хәрби уҡыу үҙәгенендә, мәғлүмәт-коммуникатив технологияларының һәм махсус элемтә системаһы һөнәренә эйә була.2018 йылда ҡулына диплом алғас 3 йыл мотлаҡ хеҙмәт итергә тейеш була. Әлеге ваҡытта Владимир ҡалаһында офицер-лейтенант дәрәжәһендә хеҙмәт итә. Шулай итеп, беҙҙең гимназия ҡанаты аҫтында Илмир Тәлғәт улы кеүек маҡсатлы, башҡорт рухлы, физик яҡтан сыныҡҡан, башҡаларға үрнәк булырҙай егеттәребеҙ артыр тигән ышаныста ҡалам.

## Рәхмәт һиңә, Еңеү һалдаты!

ФӘТКУЛА ӘХМӘЗУЛЛА улы Түләбаевҡа танк эсенда ике һуғышты үтергә килә . Ейәнсура районының Үрнәк аулында тыуып үҫкән егетте 1942 йылда 18 йәше тулыр – тулмаҫтан һуғышҡа алып китәләр.Уға тиклем Фәтҡулла ағай тракторсылар курсында уҡып сыҡҡан була,шул уны туранан – тура танк водителе итеп ултыртыуға сәбәп була ла инде.Соленск янында һуғышҡа инеп,бер нисә тапҡыр яраланып һәм контузия алып,тағы ла сафҡа баҫып,дошманды ҡыуып,ул Германияға барып инә.

Немец фашистарына ҡаршы һуғышты ослап ҡуйғас,Японияға ҡаршы яу асыла.Бында ла Фәтҡулла ағайһыҙ барып сыҡмай.Алыҫ Көнсығышта самурайҙарҙы ҡыйратып, һуғышты тамамлағас та Фәтҡулла Түләбаевҡа тиҙ генә ҡайтып китергә яҙмай әле – ул башҡорт халыҡ йырында йырланған Порт – Артур ҡалаһы янында хеҙмәтҡә ҡала. Шулай итеп,һигеҙ йыл әрмелә йөрөп,1950 йылда ғына тыуған яҡтарына ҡайтырға яҙа яугирға .

Ейәнсура районы үҙәге Исәнғол башҡорт гимназияһында уҡыусылар менән осрашыуҙа Фәтҡулла ағай үҙенең һуғыш йылдары, һуғыштан һуңғы осор ауырлыҡтары тураһында һөйләне:

-Беҙ ил өҫтөнә төшкән ауырлыҡтарҙы иңебеҙгә күтәреп,ҡул көсө менән еңеп сыға алдыҡ . Ә һеҙгә матур итеп уҡып,белемегеҙҙе төп көс итеп ҡулланыр өсөн барлыҡ шарттар ҙа тыуҙырылған,-тип фатиха бирҙе балаларға ветеран.-Әле һеҙ белем алған мәктәптәрҙе беҙ хыялда ла күҙ алдына килтерә алмай инек . Әммә Еңеүҙән һуң тормош барыбер яҡшыраҡ буласағына ышаныс ҙур ине,хәҙер шуны үҙ күҙҙәрем менән күрергә яҙҙы, тине ...





## Илебеҙгә Еңеү килтергән һалдаттарҙың береһе

Минең ҡартайым, Дәүләтшин Хәмзә Абдулла улы, 1923 йылдың 20 февралендә Күгәрсен районының Дәүләтша ауылында ҙур крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Үҙ ауылында башланғыс, артабан Ибрай ауылында 7 йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, 1939 йылда Стәрлетамаҡ педагогик училищеһына уҡырға инә. Унда 2 курс тамамлап өлгөрә, Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Был ваҡытта Стәрлетамаҡта уҡытыусылар әҙерләүсе институт ойоштора башлау сәбәпле, педучилищены Дәүләкәнгә күсерәләр. Хәмзә Абдулла улы унда ҡышҡы каникулға тиклем уҡый, каникулдарҙан һуң уҡырға мөмкинселеге булмай, ауылда ат ҡараусы булып эшләй башлай.

1942 йылдың 22 мартында уны әрме хеҙмәтенә саҡыралар, һуңынан 42 кешенән торған командаға етәкселекте тапшырып, Ағиҙел аръяғында урынлашҡан Миловка ауылында ойоштора башлаған частьҡа ебәрәләр. Июнь айында улар Воронеж фронтына юл алалар. Унда улар артҡа сигенгән башҡа частьтарға оборона тоторға мөмкинселек бирер өсөн алдан әҙерләнгән ут нөктәләре менән, траншеяларҙа бер туҡтауһыҙ һөжүмгә килгән немец илбаҫарҙарын туҡтатырға, тигән приказ алалар. Ошо алышта ҡартайым яралана, дошман пуляһы унын яурынын яралай. Бында күп һалдаттар пленға төшә. 19 йәшлек йәш егет – Хәмзә Абдулла улы, взвод командаһы кесе лейтенант Пушканов, иң йәш һалдат Ваганкин менән Воронежға тиклем, иң ҡыҫҡа төндә йүгерәләр, әсиргә төшөүҙән ҡасалар. «Был төндә әсиргә төшөү мәсхәрәһенән мине физик яҡтан көслө

булыуым ҡотҡарҙы. Стәрлетамаҡ ҡалаһынан ауылыбыҙға тиклем йәйәү, саңғыла йөрөүем ярҙам итте»,тип иҫләй һуңынан ветеран. Тимер юл станцияһында уларҙы санитар поезҙға ултырталар. Воронеждан сыҡҡас, 30-40 саҡрым дошмандың ут аҫтында баралар. Яралылар тулы эшелон ут көлтәһе аҫтында ҡала. Кемдәр йөрөй ала, улар санитар карточкалар алып, күп ауырлыҡтар аша, Саратовск өлкәһенең хәрби госпиталенә барып етәләр. Һауығып сыҡҡас, Саранск ҡалаһына топограф-иҫәпләүсе итеп ебәрәләр. Ошо частьта 1945 йылдың 26 апреленә тиклем яу яланын үтә. Тағы яралана, баш һөйәгенә дошман пуляһы тейеп, госпитальгә эләгә. Ошонда Хәмзә Абдулла улы Бөйөк еңеүҙе ҡаршылай. Воронеж, Волхов, Брянск, Украина фронттарында һуғышырға тура килә ҡартайыма. Дошмандарҙың үтә лә ҡаршылыҡ күрһәткән позицияларын өҙгәндән һуң уларҙың частьтарын икенсе урынға ебәрер булғандар. Һауыҡҡандан һуң уны 25-се механизацияланған гвардия полкына ебәрәләр. Венгрияла, Германияла тора был полк. 1947 йылда Советтар Союзына ҡайтарылғас, Тбилисиҙағы Севастополь полкында 56 мм пушкалар батреялары бүлегенең идаралығында командир вазифаһында хеҙмәт итә. СССР-ҙың Юғары Совет президентының 1947 йылдың 4 февралендә сыҡҡан ҡарары буйынса демобилизциялана. Ҡаһарман һалдат Дәүләтшин Хәмзә Абдулла улы «Батырлыҡ өсөн», «Һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн», «Германияны еңгән өсөн» медальдары менән бүләкләнә.

Оҙаҡ йылдар мәғариф өлкәһендә эшләй. Директор, директор урынбаҫары, укытыусы булып, йәш быуында тыуған илгә һөйөү тәрбиәләй, сәләмәт тормошто пропагандалай.

2014 йылдың 10 ғинуарында вафат була. Хәмзә Абдулла улы гимназиябыҙ үткәргән тәрбиәүи сараларҙа йыш ҡатнаша. Ҡыҙы – Гөлсәсәк Хәмзә ҡыҙы һәм кейәүе – Мансур Мөхтәр улы оҙаҡ йылдар гимназияла эшләнеләр. Бөгөнгө көндә үҙем дә ҡартайым һалған тәрбиәне,илһөйәрлек,ватансылыҡ тойғоларын йәш быуын күңеленә һалырға тырышам.

Уликанова Ә.М., тәрбиәсе




# Уҡыусылар ижады

## Ҡартатайым менән ғорурланам

1941 йылдың 22 июнендә беҙҙең илгә немецтар һөжүм иткән. Бөйөк Ватан Һуғышы башланған көндән бер өйҙө лә, бер ғаиләне лә һуғыш урап үтмәгән. Улдар,ағайҙар,олатайҙар,ҡартатайҙар һуғышҡа киткән. Күптәре ҡайтмай һуғыш яланында ятып ҡалған, күбеһе яраланған .Улар һуғыштан иҫән-һау ҡайтһалар ҙа йөрәктәрендә, яу ҡырында ятып ҡалған дуҫтарының, хеҙмәттәштәренең исемдәре мәңгелек онотолмаҫ яра булып уйылып ҡалған. Был ауыр йылдарҙа халыҡҡа күпме ауырлыҡтар, ғазаптар кисерергә тура килгән . Ҡатын-ҡыҙҙарға, балаларға тылда бик ауырға булған .Улар фабрика,заводтарҙа төрлө техникаға детальдар, һауыт-һаба, кейемдәр, төрлө әйберҙәр етештергәндәр. Ауыр эш 12-14 сәғәттәр буйы станок төбөндә тынғыһыҙ дауам иткән. Халҡыбыҙ бөтә көсөн биреп еңеү өсөн эшләгән. Ауыр ваҡыттарҙа ла бирешмәгән, берҙәм булған. Һуғыш яланында миллионлап кешеләр һәләк булғандар, күптәре пленға эләккән. Өс йыл буйына немец аккупацияһында булған Ленинград ҡалаһы тарихы бигерәк әрнеүле. Дошманды бер ҡасан да еңә алмаҫлыҡ тойолһа ла , халыҡ бар көсөн биреп еңеү килтергән. Халҡыбыҙ иңгә- иң терәшеп , берҙәм булғаны өсөн аяуһыҙ фашисттарҙы еңгән. Шуның өсөн дә беҙ уларға мәңгелек рәхмәтлебеҙ.



Минең карт ҡартатайым да Ишмырҙин Мөхәррәм Нәжми улы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашкан . Ул кесе сержант

булып хеҙмәт иткән. Һуғыш йылдарында бик күп батырлыҡтар күрһәткән. Шуларҙың береһе,хәрби документтарҙан:«26 января 1945 года в районе Гермакау через реку Нитце строился мост, противник вёл сильный артиллерийский огонь, товарищ Ишмурзин несмотря на это обеспечил связь с КП корпусом. 27 января 1945 года в районе села Горниц, ночью товарищ Ишмурзин под обстрелом автоматчиков исправил связь с КП 37-ой бригады…»

Ошо батырлығы өсөн Өсөнсө Дәрәжә Дан Ордены менән наградлана.Карт ҡартатайым Курск Дуғаһындағы алышта , яурынына снаряд ярсығы эләгеп,каты яралана. Госпитальдә ятып сыҡкас,ҡабат һуғышҡа алына .Бик күп орден һәм миҙалдар менән наградлана. Һуғыш бөткәндән һуң да ике йыл хеҙмәт итеп 1947 йылда әйләнеп ҡайта.Мин ҡарт ҡартатайым менән бик ныҡ ғорурланам һәм рәхмәтлемен.

Мортазин Рәмис,5-се класс уҡыусыһы

### Һәйкәл булып ҡайткан батырҙар иҫтәлегенә

Бөйөк Еңеүҙең етмеш биш йыллығын ҡаршылағанда Иҫәнғол ауылында бик күп яңы һәйкәлдәр барлыҡҡа килде.Чекмарев паркын йәнләндереү өҫтөндә тирә –яғы кәртәләнде, ял итеү урындары, Афған һуғышында һәләк булған һалдаттар иҫтәлегенә,тыл һәм хеҙмәт ветерандары, һуғыш осоро балалары һәм әсәйҙәр иҫтәлегенә яңы һәйкәлдәр асылды. Дуҫлыҡ ял итеу майҙансығында Советтар Союзы геройҙары аллеяһы булдырылды, был иҫтәлекле ваҡиға тарафынан тормошҡа ашырылды.

Ҡәйүм Хәбирахман улы Әхмәтшин 58-се полктың взвод командир ярҙамсыһы,фронттың иң алғы һыҙығында ҡурҡыу белмәç тип йөрөткәндәр.

Николай Васильевич Бедеренко Тиса йылғаһында күрһәткән батырлыҡтары өсөн бирелә.

Иван Ильич Корнеев үҙенең отряды составында Планице ҡалаһын алғанда немец илбаçарҙарына ҡаршы көрәштә ҡаһарман Алексей Иванович Филатов 116 тапҡыр осош яһай, хәрби алыштарҙа дошмандың туғыҙ самолетын атып төшөргән булған. Шуның өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Гвардея сержанты Ҡотлоәхмәт Ҡотлоғәлләм улы Хәйбуллин Чернигов ковалерия полкының ПТР командиры булған.

Шулай итеп, ил алдында үҙ бурыстарын ышаныслы атҡарған батырҙарҙың исемдәрен мәңгелләштереү,уларҙы бер ҡасанда онотмай киләсәк быуын балаларына еткереү беҙҙең бурысбыҙ булып һанала.

Йылҡыбаев Искәндәр, 6А класы уҡыусыһы

## Хәтер –мәңгелек!



**“Һәйкәл янында”**





**“Ветеранды ҡотлайым”**

Аҡсурина Лилиә бик аҡыллы, рухлы ҡыҙ. Ул һүрәттәр төшөрөргә ярата. Һүрәттәре менән төрлө конкурстарҙа ҡатнаша.
Һәр ваҡыт призлы урындарҙы ала.
Грамоталары, дипломдары күп.
“Класыбыҙҙың активы составында ул - художник. Уның ҡатнашлығынан тыш бер стенгазета, плакат та эшләнмәй “–ти класс старостаһы Ильнара Бакирова.



**“Катюша”**

Хәкимова Вәсилә 8 кластың актив ҡыҙҙарының береһе. Төрлө конкурстарҙа, конференцияларҙа ҡатнаша. Был“Катюша ”машинаһы менән ул “Йәшел планета” халыҡ-ара конкурсында ҡатнашып беренсе урынды яуланы.



**“Өшөткөс Ленинград”**

Ленинград блокадаһы тураһында тәрбиә сәғәтенән һуң, үҙенең тъәҫораттарын Хәлилова Карина ҡағыҙға төшөрҙө.




Карина бәләкәй саҡтан һүрәт төшөрөргә ярата, куп китаптар уҡый, илебеҙҙең тарихы менән ҡыҙыҡһына. Шуға ла Шайморатов генералдың иң шәп портрет төшөрөү буйынса республика конкурсында ҡатнашып серификат алды.

## Минең ҡарт ҡартайым –һуғыш ветераны

Минең ҡарт ҡартайым 1921 йылда Түбәнге Муйнаҡ ауылында урта хәлле ғаиләлә тыуған. Мәктәптә укып ете класты бөтөргән.Ул немец телен яҡшы өйрәнгән,уҡый һәм яҙа белгән.

Һуғыштың тәүге көндәренән үк, 1941 йылда,һуғышҡа алынған. Немец телен яҡшы белгәне өсөн, разведчик һәм связист булған. 1944 йылда яраланып, еңелсә контузия алып хәрби госпиталгә ятҡан. Баш бармағы өҙөлгән һәм ҡолағы артында мина ярсығының урыны ҡалған.госпиталдән һуң уны ҡайтарып ебәргәндәр.

Ҡайтҡас өйләнгән. 1945 йылда,һуғыш бөткәс,киренән хеҙмәт армияһына алынған.Унда төрлө ерҙә төҙөкләндереү эшендә ҡатнашҡан.

Аҙаҡтан колхозда көтөүсе, бригадир булып эшләгән.

«Ҡыҙыл йондоҙ”, “Дан ордендары” ,”Германияны алған өсөн” миҙалы менән бүләкләнгән Арсланов Яҡуп Йәнгир улы 1975 йылдың 1 сентябрендә яҡты донъянан киткән.

Мин ҡарт ҡартайым тураһында ҡәрсәйем һөйләүенән генә беләм. Үҙем күрмәһәм дә шундай ҡартайым булыуы менән ғорурланам.

Рәйемғужина Айсибәр,8-се класс

## Ҡарт ҡартайым –батыр сержант

Тыуған илебеҙгә немец илбаҫарҙарының һөжүм итеүе барлыҡ кеше эҙмыштарын селпәрәмә килтерҙе. Минең ҡартайым эҙмышы ла башҡа шул осор йәштәренеке кеүек була. 1942 йылдың март айында ҡартайым Шәрифҡол Сәхри улы Ҡәҙербәҡов иптәше Бәхет олатай менән Һарыҡташ ауылында, фронтҡа ебәреү өсөн поезға ылау оҙатып бара. Шунан ҡайтып килгәндә, йәшәгән ауылына бер-нисә саҡрым алыҫлыҡтағы Башбармаҡ ауылына етеп килгәндә, уларға военкоматҡа барырға әйтелә. Улар ауылдарына ҡайтып тормай кире әйләнеп район үҙәгенә Зианчура районы хәрби комиссариатына юлланалар.

Хәрби комиссариатта уларҙы хәҙерге Силәбе ҡалаһына оҙаталар. Ҡартайым хәрби эшелон менән һуғышҡа китә.Ул башҡорт егеттәренә хас көс,ғәйрәт менән батырҙарса һуғыша.

Һуғышҡа барғас Көнбайыш фронтының 880 стрелковый полкы яугирҙары менән фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғыша. 1942 йылдың декабрь айында Висла йылғаһы буйында көслө алыш була. Фашистар самолеттан ут яуҙыралар.Баш ҡалҡытырға ла бирмәйҙәр.

Ҡартайымдың күкрәген фашист пуляһы тишеп сыға. Үҙе ҡаты яраланған булһа ла,пуля ямғыры аҫтынан яралы командирын ташламай һыуыҡ һыуҙан ярға алып сыға һәм иҫен юғалта. Госпитальдә иҫенә килә. Был яуҙа күрһәткән батырлығы өсөн Шәрифҡол Сәхри улы Ҡәҙербәков “Кызыл Йондоҙ” ордены менән наградлана. Госпиталдән сыҡҡас ҡартайым 2 Белорусс фронтының, 8 танк корпусының 67 танк бригадаһында командир отделения була. Улар тыуған еребеҙҙе фашистарҙан азат итеп алға баралар.

1943 йылдың сентябрь айында уң яҡ аяғы яралана. Шулай булһа ла госпитальдә оҙаҡ ятмай ул. Кире фронтҡа, үҙенең часына китә.

Маршал Рокоссовский К.К. командовать иткән 2-се Белорус фронтында Белоруссияны азат итеү операцияһында ҡатнаша. 1945 йылдың февралендә бик ҡаты яралана. Ике ҡулы ла яраланып, урта бармағын ҡырҡалар.

Һуғыштан һуң Матросов исемендәге колхозда чабан булып эшләй ҡартайым.Ул намыҫлы,тырыш ,үҙ эшенә бик яуаплы ҡарай. Ҡатыны Вәлимә өләсәйем менән 7 бала үҫтерәләр. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Ҡәҙербәков Шәрифҡол Сәхрей улының фашисты еңгән өсөн алған орден, миҙалдары эргәһенәдә, тыныс тормошта күрһәткән хеҙмәттәренә бирелгән Почет грамоталары ла урын ала. Беҙ уның вариҫтары , ҡартайыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Бөгөн ҡартайым яулаған тыныс күк аҫтында тырышып белем алабыҙ.

Күҙәшева Регина, 8-се класс

## Ҡартатайым миҙал таҡҡан

Ҡартатайым миҙал таҡҡан ...
Һаман да ул беҙҙең хәтерҙә.
Шул миҙалды алыр өсөн,
Күпме алыш, яуҙар кисергән.

Ҡартатайым был алышты,
Васыят итеп беҙгә ҡалдырған.
Халыҡ тыныс йәшәһен тип
Улар Еңеү илгә килтергән!

Ҡыуандыҡова Эльза ,9А класы уҡыусыһы

## Еңеү яҙы

Ҡаршылайым Еңеү яҙын,
Оло ғорурлыҡ менән.
Ҡартай ҡайтҡан бит һуғыштан,
Еңеү яулап, дан менән.
Ул һуғышҡа киткәндә,
Ун һигеҙе лә тулмаған.
Йәш булһа ла, ҡурҡыу белмәй,
Һәр ваҡыт алда булған.
Был хаҡта һөйләй уның,
Түшендәге миҙалдар.
Тәрән эҙен ҡалдырған,
Уңалмаған яралар.
Тағы Еңеү яҙы етә,
Юҡ янда ҡартай ғына.
Ғаләмгә тыныслыҡ теләп,
Ҡарай рәсемдән генә.

Имелбаева Айгөл, 5-се класс

## Еңеү көнө

Күктә моңһоу ай балҡый,
Күҙҙән әсе йәш аға.
Һөйгән йәрен һағынып,
Ҡыҙҙар, илап, айға баға.
«Ҡайтыр әле», тип ышанып,
Өмөттәрен һүндермәй,
Доғаларын уҡый-уҡый,
Көтә ғәзиз улын әсәй.
Тик белмәй шул әсә улының
Сит ерҙәрҙә ятып ҡалыуын,
Тыуған илен дошмандарҙан һаҡлап,
Ят илдәрҙә ҡорбан булыуын.
Еңеү көнө. Юғалтыуҙар аша
Килде беҙгә бәхет көнөбөҙ.
Булһын илдә тыныслыҡ,
Аяҙ торһон күгебеҙ!
Тән яраһы йүнәлер ҙә ул,
Тик баҫылмаҫ йөрәк яраһы,
Батырҙарыбыҙҙы иҫкә алып,
Кәрәк беҙгә алға бараһы.

Айгүзәл Мөхәмәтйәнова, 9- сы класс

## Еңеү салюты

Яҡтырһын салют уттары,
Еңеү көнө бит бөгөн.
Салют уттары күк яҡты,
Доньялар имен торһон!

Ҡотошева Шәүрә,6Б класы

